# Сентябрь - һарысай

**Картотека № 1**

**Күҙәтеү:** **“**Көҙ билдәләре”

*Маҡсаттар:*

- йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең үҙ-ара бәйләнеше тураһындағы
- белемде нығытыу;
- көҙ миҙгеле ваҡытында үҫемлектәр һәм хайуандар тормошондағы
- үҙгәрештәрҙе билдәләргә өйрәтеү;
- көҙ айҙары тураһында төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

***Күҙәтеү барышы.***

Тәрбиәсе балалаларға һорауҙар бирә.

- Әлеге мәлдә Шамонин ауылында ниндәй миҙгел?
- Көҙ икәнлеген нисек белдегеҙ?
- Көҙ билдәләрен һанап үтегеҙ.
- Ни өсөн көҙ һалҡыныраҡ?
- Көҙ миҙгелендә кеше нимә менән шөғөлләнә?
- Хайуандар көҙгә нисек яраҡлаша?

Һарысай – көҙҙөң иң матур мәле. Тәбиғәттең алтын миҙгеле башҡорттарҙа һары ай, йәғни һарысай тип атала ла инде. Иң беренсе  Шамонин ауылында ҡайын ағасы һарғая һәм япраҡтарын ҡоя башлай. Шунан – йүкә, тирәк, уҫаҡ япраҡтары ҡыҙыл, һары сағыу төҫтәргә инә.

Көҙ ҡояш һүрәнерәк йылыта, ямғырҙар йышыраҡ яуа. Иртәнсәк ҡырауҙар күҙәтелә. Ҡоштар көньяҡҡа осор өсөн бер тупҡа йыйыла.

*Һынамыш*

1 сентябрь йылы булһа, көҙ йылы була.

*Мәкәл*

Көҙгө ашлыҡты көлгә сәс, яҙғы ашлыҡты боҙға сәс.

Илай - илай көҙ була, көлә - көлә яҙ була.

*Йомаҡ.*
Аяҡ аҫты төҫлө япраҡ,
Йомшаҡтан атлап киләм.
Шул япраҡтан өләсәйем,
Әйтерһең, һуҡҡан келәм.
*Шиғыр.*
Көҙгө ҡояш шаян икән,
Күренә лә юғала.
Нисек шулай көн буйына
Арымай уйнай ала?
Ҡасма ҡабат, ҡасма, ҡояш,
Нурҙарыңды түк инде.
Болотҡа йәшенгәнеңде
Белеп торам бит инде. (Г.Юнысова)

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**

Балалар баҡсаһы биләмәһендәге ҡойолған япраҡтарҙы һепереү.

*Маҡсаттар:*

- башҡарылған эш һөҙөмтәһенән яҡшы кәйеф тыуҙырыу;
- экологик мәҙәниәт тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйындар**

“**Осто-осто**” (хәрәкәттәр менән)
Осто - осто ҡоштар осто,
Осто - осто япраҡтар осто,
Осто - осто ҡыҙҙар осто,
Осто - осто ҡаҙҙар осто,
Осто - осто самолеттар осто,
Осто - осто балалар осто
Осто - осто турғайҙар осто.

*Маҡсаттар:*

- уйын ҡағиҙәһенә ярашлы уйнарға өйрәтеү;
- етеҙлек һәм cослоҡто үҫтереү.

"Өкө"
*Маҡсаттар:*
- тирә-йүндә йүнәлеш табырға өйрәтеү;
- уйынға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Шәхсән эш**
Флажокка тиклем ике аяҡта һикереү һәм урынға кире ҡайтыу.
*Маҡсат:* һикереүҙе камиллаштырыу.
Үҙ-аллы уйындар өсөн күсермә материалдар

**Күҙәтеү №** 2

**Күҙәтеү: "**Китер ҡоштар"
*Маҡсаттар:*

- китер ҡоштар тураһындағы белемде нығытыу;
- көҙ миҙгеле ваҡытында ҡоштар тормошондағы үҙгәрештәрҙе билдәләргә өйрәтеү;
- йәнле тәбиғәттең билдәләрен айырырға өйрәтеү.

***Күҙәтеү барышы***
Тәрбиәсе балалаларға һорауҙар бирә.

- Ниндәй ҡоштарҙы китер ҡоштар тип атайҙар?
- Шамонин ауылында ниндәй китер ҡоштар күргәнегеҙ бар?
- Ни өсөн ҡоштар йәй бала сығара?
- Ни өсөн көҙөн ҡоштар йылы яҡка осалар?

Йәй көнө ҡоштарға йылы, туҡланыу өсөн аҙыҡ етәрлек. Йомортҡа һалып, бала сығаралар. Көҙ аҙыҡ ҡырҡа кәмей. Иң беренсе бөжәктәр юғалалар, үҫемлектәр һулыйҙар, орлоҡтар, емеш – еләктәр кәмей. Күп ҡоштар тупка йыйылып, йылы яҡтарға осалар. Улар осар ҡоштар тип атала. Китер ҡоштар: ҡыр ҡаҙҙары, ҡыр өйрәктәре, һандуғас, ҡарлуғас, селән, торна, сыйырсыҡ һ.б.

*Мәкәл һәм әйтемдәр*
Һәр ҡош үҙ ояһын маҡтай.
Ҡош та һайланмайынса ҡыуаҡҡа ҡунмай.
Ҡоштоң матурлығы төҫөнә ҡарап,кешенең матурлығы эшенә ҡарап.
*Йомаҡ*
Йылы яҡҡа ирекһеҙҙән
Осоп китә ҡар яуғас.
Яр буйында, ҡыйыҡтарҙа
Оя ҡора ... (ҡарлуғас).
**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**
Балалар баҡсаһы биләмәһендәге ҡойолған япраҡтарҙы һепереү.
*Маҡсаттар:*
- Бер - береһенә ярҙам итеп, татыу эшләргә өйрәтеү;
- экологик мәҙәниәт тәрбиәләү.
**Хәрәкәтле уйындар**
“Алырмын ҡош, бирмәм ҡош”, “Өсөнсө артыҡ”
*Маҡсаттар:*
- уйын ҡағиҙәһенә ярашлы уйнарға өйрәтеү;
- етеҙлек һәм сослоҡто үҫтереү.
“Ҡоштар”
*Маҡсаттар:*
- тирә-йүндә йүнәлеш табырға өйрәтеү;
- уйынға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.
**Шәхсән эш**
Хәрәкәттәр үҫеше.
*Маҡсат:*
- атлау техникаһын яҡшыртыу (үксәнән аяҡ осона күсеү, ҡул хәрәкәттәрен әүҙемләштереү).
Үҙ - аллы уйындар өсөн күсермә материалдар.

**Күҙәтеү №3**

**Күҙәтеү:** “Ҡайын ағасы”

*Маҡсаттар:*

- ҡайын ағасы, уның төҙөлөшө, йыл миҙгеленә ярашлы үҙенсәлектәре менән таныштырыу;
- тәбиғәттең тере объекты булараҡ ағасҡа һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

***Күҙәтеү барышы***

Тәрбиәсе балалар менән әңгәмә үткәрә.

*Йомаҡ*

Күлдәктәре аҡ ҡына,
Бөҙрә уның сәстәре.
Бысаҡ тейҙеме яҙын.
Сәсрәп сыға йәштәре.
Тик яраламаһын һис кем
Матур йәшел дуҫҡайын.
Урман буйлап шаулаһын
Беҙҙең ерҙә аҡ ... (ҡайын).

- Ни өсөн ҡайын ағасының япраҡтары һарғайҙы?
- Көҙ ағастар нисек үҙгәрә?
- Ағастар ҡышҡа нисек әҙерләнә?

Көҙөн ҡайындың һыуыҡ булыу сәбәпле иң беренсе өҫкө япраҡтары, һуңынан аҫҡы япраҡтары һарғая. Ел иҫкән ыңғайға япраҡтары алтын тәңкә булып, ергә ҡойола.

Балаларға ҡойолған япраҡтарҙан гөлләмә эшләргә тәҡдим итеү.

*Һынамыш*

Ҡайын һыуы күп аҡһа, йәй ямғырлы булыр.

*Шиғыр*

Көҙгө ҡояш шаян икән,
Күренә лә юғала.
Нисек шулай көн буйына
Арымай уйнай ала?
Ҡасма ҡабат, ҡасма, ҡояш,

Нурҙарыңды түк инде.
Болотҡа йәшенгәнендә
Белеп торам бит инде. (Г.Юнысова)

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**

Юлды һепереү, сүп-сарҙы йыйыу.

*Маҡсаттар:*

- эшһөйәрлек, үҙ-ара аңлашып эшләргә өйрәтеү ;
- хеҙмәттән һуң эш ҡоралдарын үҙ урындарына йыйып ҡуйыу.

**Хәрәкәтле уйындар**

**“Беҙ шаян балалар”, “Буяуҙар”**

*Маҡсаттар:*

- уйын ҡағиҙәһенә ярашлы уйнарға өйрәтеү, тиҙ һәм сос хәрәкәтләнергә өйрәтеү;
- йүгереүҙә күнектереү.

**Шәхсән эш**

“Ҡармаҡ”

*Маҡсаттар:*

- һикереүҙә күнектереү;
- үҙ-үҙеңә ышаныс тәрбиәләү.

Үҙ-аллы уйындар өсөн күсермә материалдар.

**Күҙәтеү № 4**

**Күҙәтеү: “**Ҡырмыҫҡа”

*Маҡсаттар:*

- ҡырмыҫҡаның тышҡы ҡиәфәте, үҙенсәлектәре тураһында белемде киңәйтеү;
- тирә-яҡ донъяға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

***Күҙәтеү барышы***

Тәрбиәсе балалар менән әңгәмә үткәрә.

*Йомаҡ*

Йомро башлы,
Нескә билле.
Тешләһә бик әсетә. (Ҡырмыҫҡа)

- Ҡырмыҫҡалар нимә менән туҡлана?
- Ҡырмыҫҡаның йәшәгән урыны нисек атала?
- Ҡырмыҫҡалар иләүҙе нимәнән эшләйҙәр?
- Ҡышҡылыҡҡа нисек әҙерләнәләр?

Ҡырмыҫҡа – Ер планетаһында иң көслө бөжәк. Ул үҙенең ауырлығына ҡарағанда 10 тапҡырға ауырыраҡ әйберҙәр ташый. Бер ҡырмыҫҡа иләүе ғаиләһе йылына 2 миллиондан ашыу бөжәктәрҙе юҡ итә. Йәшәгән урыны – иләү, тип атала. Ҡырмыҫҡалар иләүҙе ылыҫ энәләренән, япраҡтарҙан, ағас ҡайырынан, ботаҡтарҙан эшләйҙәр. Сентябрь аҙағында ҡырмыҫҡалар күренмәй. Улар иләү төбөнә, аҫҡа төшөп йәшенәләр һәм ҡышҡы йоҡоға талалар.

Ж.Кейекбаевтың «Айыу ҡырмыҫҡаға ниңә үсле?» әкиәтен

һөйләү.

*Һынамыш*

Ҡырмыҫҡа ҡанатлана башлаһа, көн яуынға әйләнә.

Ҡырмыҫҡа иләүҙәре көҙ башынан уҡ ҙур булһа – ҡаты ҡышҡа.

Ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығыу – шау-шыу, талашты көсәйтеп ебәреү

*Шиғыр:*

Ҡырмыҫҡалар

Ниндәй тупраҡ өйөмө?

Ҡырмыҫҡалар өйөмө?

Эргәһенә килдем шул,

Ни икәнен белдем шул.

Вәт исмаһам тамаша!

Ҡырмыҫҡалар ҡайнаша

Үҙҙәре кеп – кес кенә,

Бушамайҙар һис кенә.

Йәй буйы тик ятмайҙар,

Ҡорттарҙы яратмайҙар

Беҙҙең йәшел урманды

Ауырыуҙан һаҡлайҙар.

(Ғ.Ғәлиева)

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**
Йәшелсә баҡсаһында ҡабаҡтар йыйыу.
*Маҡсаттар:*
- эшһөйәрлек, үҙ-ара аңлашып эшләргә өйрәтеү ;
- эшләгән эштең һөҙәмтәһен күреп, ҡәнәғәтлек алыу.

**Хәрәкәтле уйындар**

“Өйрәк һәм төлкө”, “Айыу менән ҡуяндар”.

*Маҡсаттар:*
- йүгереүҙә күнектереү.
- балаларҙа ойошҡанлыҡ тәрбиәләү, һаҡ, иғтибарлы булырға өйрәтеү.

**Шәхсән эш**
Хәрәкәттәр үҫеше
*Маҡсат:*
- түҙемлелек тәрбиәләү.
Үҙ - аллы уйындар өсөн күсермә материалдар.

Һарысай – көҙҙөң иң матур мәле. Бар тәбиғәт алтынға мансылғандай.

Күп шағирҙарҙы, рәссамдарҙы илһамландырған илаһи миҙгел.

Алтын көҙ!

Тәбиғәттең алтын миҙгеле башҡорттарҙа һары ай, йәғни һарысай тип атала ла инде. Иң беренсе Башҡортостанда ҡайын ағасы һарғая һәм япраҡтарын ҡоя башлай. Шунан – юкә, тирәк, уҫаҡ япраҡтары ҡыҙыл, һары сағыу төҫтәргә инә. Айҙың урталарында япраҡ ҡойолоу көсәйә. Саҡ ҡына иҫкән ел дә аяҡ аҫтына төҫлө балаҫ итеп япраҡтарҙы түшәп һала.

Көҙҙөң беренсе айы бәшмәккә лә мул була. Оҫта бәшмәкселәр урманда ял да итә, бәшмәк тә йыя.

Һарысай – күп хайуан – кейектәрҙең дә тормошона йоғонто яһай. Ҡуян, тейендәр тундарын алыштыра башлай. Тейен ҡышҡылыҡҡа ағас ботаҡтарына элеп бәшмәк киптерә.

Бурһыҡ та тик ятмай, тамырҙарҙы киптереп ояһына ташый, төрлө үҫемлек орлоҡтарын йыя. Бурһыҡ ояһында ҡай саҡта 4-5 килограмм орлоҡ табырға була. Ҡыш йоҡлаһа ла бурһыҡтар ваҡыт – ваҡыты менән уянып, үҙе әҙерләгән аҙыҡ запасы менән һыйланырға ярата.

Ай аҙағында терпеләр өндәренә инеп, йә япраҡтарға төрөнөп апрель аҙағына тиклем тәрән йоҡоға тала.

22 сентябрь көн менән төн оҙонлоғо тигеҙләнгән көн.

Сентябҙә "Әбейҙәр сыуағы", "Сөмбөлә" халыҡ байрамдары үткәрелә.

**Шиғыр:**

Сентябрь

Сентябрҙең холҡо ҡыҙыҡ:
Йә илай ул, йә көлә.
Болот араһынан ҡай саҡ
Ҡояш сығырын белә.
Сентябрҙең ҡояшы ла
Сабыр ҙа, һүрән генә
Үрмәкестәр ағастарға
Ауҙарын үрә генә.
(Г.Юнысова)

**Күҙәтеү № 5**

**Күҙәтеү:** "Үрмәксе"

*Маҡсаттар:*

- үрмәксенең тышҡы ҡиәфәте, үҙенсәлектәре тураһында белемде киңәйтеү;
- тәбиғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

***Күҙәтеү барышы***
Тәрбиәсе балалар менән әңгәмә үткәрә.

Лупа ярҙамында үрмәксе ауын ҡарау.

- Ни өсөн үрмәксе ау үрә? (себен, серәкәй тотоп туҡлана)
- Ҡайҙа йәшәй һәм нимә менән туҡлана?
- Үрмәксенең дошмандары бармы?

Үрмәксе үҙенсәлекле фермент сығарып, себен, серәкәй, күбәләктәр тотор өсөн ау үрә. Дошмандары: ҡоштар, терпеләр, кеҫәрткеләр һ.б.
Үрмәкселәр ағас ҡайыры араһына кереп, яҙға тиклем йоҡоға талалар.

*Йомаҡ*

Күрер күрмәҫ күҙҙәре,

Селтәр бәйләй үҙҙәре. (Үрмәксе)

*Һынамыш*

Үрмәкес ауы бейектә осһа, аяҙ була.

Үрмәксе ауҙары күп булһа - йылыға.

*Шиғыр*

**Үрмәксе**

Етеҙ энәләре менән

Баҡсабыҙҙа үрмәксе

Үҙенә мамыҡ шәл бәйләй

Әсәйемдән күрмәксе.

(А.Йәғәфәрова)

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**

Сәскә баҡсаһында орлоҡтар йыйыу.

*Маҡсаттар:*

- сәскә орлоҡтарын йыйырға һәм һаҡларға өйрәтеү.

**Хәрәкәтле уйындар**

“Ҡап та ҡоп!”, “Кем тиҙерәк?”

*Маҡсаттар:*

- татыулыҡ тәрбиәләү, күтәренке кәйеф булдырыу;
- етеҙлек, йүгереклек үҫтереү, еңеүгә сәмлелек тәрбиәләү.

**Шәхсән эш**

Хәрәкәттәр үҫеше

*Маҡсат:* һикергес ярҙамында һикереүҙә күнектереү.

**Күҙәтеү №6**

**Күҙәтеү: “**Сәскәләр түтәле”

*Маҡсаттар:*

- төҙөлөшөнә ҡарап (һабаҡ, япраҡтар, сәскә, тамыр), сәскәләрҙең атамаһын өйрәтеү;
- төҫөнә, формаһына, бейеклегенә, еҫенә ҡарап, сағыштырырға өйрәтеү.

***Күҙәтеү барышы***

Тәрбиәсе балалаларға һорауҙар бирә.

- Сәскә төҙөлөшө нисек?
- Беҙҙең клумбала үҫкән сәскәләр нисек атала?
- Яҙын сәскәләр тағы үҫһен өсөн ни эшләр кәрәк?

Сәскә тамыр, һабаҡ, япраҡтан тора. Таждары, төҫтәре, еҫтәре төрлө була. Сәскәләр матурлыҡтары менән беҙҙең еребеҙҙе биҙәй. Баҡса, ялан, урман сәскәләре була. Яҙын сәскәләр тағы үҫһен өсөн көҙ орлоҡтарын йыйып алырға кәрәк.

*Мәҡәл*

Гөл ҡәҙерен былбыл белер.
Гөлөнә ҡарама, төбөнә ҡара.
Гөлөң сәскә атмаһа, ҡояшҡа үпкәләмә, үҙеңә үпкәлә.

*Шиғыр*

Сәскәләрҙе, үләндәрҙе
Һаҡлайыҡ бергә.
Үҫһен улар елберләшеп
Ҡеүәтле ерҙә.

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**

Балалар баҡсаһы биләмәһендәге сәскәләрҙең орлоҡтарын йыйыу.

*Маҡсаттар:*

- өлгөргән орлоҡтарҙы өлгөрмәгәненән айырырға өйрәтеү;
- хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйындар**

“Гөлләмә”, “Тажды кем тиҙерәк йыя”

*Маҡсаттар:*

- тирә-йүндә йүнәлеш табырға өйрәтеү;
- етеҙлек һәм сослоҡто үҫтереү.

**Шәхсән эш**

Тигеҙлек һаҡлау.

*Маҡсат:* гимнастик бүрәнәгә йүгереп менеү, төшөү.

Үҙ - аллы уйындар өсөн күсермә материалдар

**Күҙәтеү № 7**

**Күҙәтеү: “**Шамонин ауылында әбейҙәр сыуағы”

*Маҡсаттар:*

- Әбейҙәр сыуағы көндәре тураһындағы белемде нығытыу;
- көҙ миҙгеле ваҡытында үҫемлектәр һәм хайуандар тормошондағы үҙгәрештәрҙе билдәләргә өйрәтеү;
- көҙ айҙары тураһында төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

***Күҙәтеү барышы***

Тәрбиәсе балалар менән әңгәмә үткәрә.

23 - 28 сентябрҙә, йәғни йылы, тыныс көҙгө миҙгелдә ҡояштың иң юғары мәле була. Халыҡ күҙәтеүенсә, "үрмәксеауҙары осоп, ел дә тынып торған көндәр" Әбейҙәр сыуағы тип атала.
Баҡса эштәрен тамамлап өлгөрмәгән кешеләр ошо йылы көндәрҙә тамамлап ҡуйырға ашыға. Өлкән әбейҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар бер - береһенә ҡунаҡҡа йөрөй, сәй эсәләр, аят-доға уҡыйҙар.
Йәштәр оло инәйҙәргә ҡамыр аштары (ҡоймаҡ, күмәс) алып барып һыйлай. Оло инәйҙәр фатиха әйтә.
Был көндәрҙә көҙгө байрам – Сөмбөлә үткәрелгән. Байрам биҙәге итеп һары сәсле ҡыҙҙы һайлағандар. Сөнки «Сөмбөл» һүҙе ғәрәпсә «һары сәс», «башаҡ» мәғәнәһендә икән. Ҡыҙға көтөлмәгән һорауҙар бирелгән. Мәҫәлән: «Балтамы, беҙме?» - тип һорағандар. Сөмбөлә : «Балта!» -тиһә, көҙ һалҡын буласаҡ боҙҙо балта менән дә вата алмаҫһың, тигәндәр.
Унын һүҙҙәрен төрлөсә юрап, көҙҙөң нисек киләһен белергә тырышҡандар.

- Әбейҙәр сыуағын нисек аңлайһығыҙ?
- Көҙҙөң ниндәй көндәре Әбейҙәр сыуағы тип атала?
- Сөмбөлә байрамы нисек үтә?

*Һынамыш*
Көҙ оҙон килһә, яҙ һуң килер.
*Йомаҡ*
Аяҡ аҫты төҫлө япраҡ,
Йомшаҡтан атлап киләм.
Шул япраҡтан өләсәйем,
Әйтерһең, һуҡкан келәм. (Көҙ)
*Шиғыр*

**Әбейҙәр сыуағы**

Көҙөн сәскәләр күренә

Әлморон ҡыуағында.

Әбейҙәр ҙә йәшәргәндәй

«Әбейҙәр сыуағы»нда.

(Р.Заһиҙуллин)

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**
Дарыу үләндәрен йыйыу.
*Маҡсат:*
- дарыу үләндәрен дөрөҫ йыйырға өйрәтеү;
- тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
**Хәрәкәтле уйындар**

“Әбей,әбей, ни ҡаҙаһың?”, “Көн менән төн”

*Маҡсаттар:*

- иғтибарлыҡ, етеҙлек, сослоҡ тәрбиәләү;
- уйынға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Шәхсән эш**
Һикереүҙе үҫтереү.

*Маҡсат:* бер аяҡта һикереүҙе нығытыу.
Үҙ-аллы уйындар өсөн күсермә материалдар

**Күҙәтеү №8**

**Күҙәтеү:** “Көҙгө ямғыр”

*Маҡсаттар:*

- йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең үҙ-ара бәйләнеше тураһындағы белемде нығытыу;
- һыу үҙенсәлектәре менән таныштырыу.

***Күҙәтеү барышы***

Тәрбиәсе балалаларға һорауҙар бирә.

- Тәбиғәткә һыу ни өсөн кәрәк?
- Ямғыр нисек барлыҡҡа килә?

Ямғыр – болоттарҙан һыу тамсылары рәүешендә яуа торған яуым-төшөм. Һыу тамсылары 0,5-6,7 мм була. Вағыраҡ тамсылы ямғырҙы бысҡаҡ ямғыр тип атайҙар. Ямғыр ҡатлы-ҡатлы болоттарҙа һыуытылған һыу тамсылары һәм боҙ кристалдары ҡушылыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Ҡушылған тамсылар ауырая һәм ергә ямғыр булап яуа. Ямғыр оҙаҡ яумай торһа, ҡоролоҡ башлана.

*Һынамыш*

Ҡарлуғастар бик түбән осһалар, ямғыр булыр.

*Мәкәл*

ҺЫУҘЫҢ ҠӘҘЕРЕ ШИШМӘ ҠОРОҒАС БЕЛЕНЕР

*Йомаҡ*

Күктән килде, ергә китте.

*Йыр “*Ямғыр уйнарға саҡыра” Ә.Таһирова, М.Сәлимов.

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**

1 төркөмгә майҙансыҡты тырма менән таҙартыу, 2 төркөмгә – сүп-сар түгеү.

*Маҡсаттар:*

- төркөм менән эшләргә өйрәтеү;
- хеҙмәткә һөйөү уятыу.

**Хәрәкәтле уйындар**

“Дауыл”, “Аҡ тирәк, күк тирәк”.

*Маҡсаттар:*

- уйын ҡағиҙәһенә ярашлы уйнарға өйрәтеү;
- тиҙ уйлау, иғтибарлыҡ, сослоҡ, ойошҡанлыҡ тәрбиәләй.

**Шәхсән эш**

Сәпкә туп ташлау.

*Маҡсат:* мәргәнлекте, ҡул хәрәкәттәренең етеҙлеген, ҡараш ярҙамында аралыҡты билдәләй белеү һәләтен, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

Үҙ-аллы уйындар өсөн күсермә материалдар

**Күҙәтеү № 9**

**Күҙәтеү: “**Һауа торошо”

*Маҡсаттар:*

-йәнһеҙ тәбиғәттә миҙгел үҙгәрешенә хас дөйөм күҙаллауҙы булдырыу;
-тәбиғәткә иғтибарлы булырға өйрәтеү.

***Күҙәтеү барышы***

Тәрбиәсе балалаларға һорауҙар бирә.

- Иғтибар итегеҙ әле, кешеләр нисек кейенә башланы?
- Күк йөҙө ниндәй төҫтә?
- Тупраҡта ниндәй үҙгәрештәр бар?

Ямғыр – болоттарҙан һыу тамсылары рәүешендә яуа торған Яуым - төшөм. Һыу тамсылары 0,5 - 6,7 мм була. Вағыраҡ тамсылы ямғырҙы быҫҡаҡ ямғыр тип атайҙар. Ямғыр ҡатлы – ҡатлы болоттарҙа һыуытылған һыу тамсылары һәм боҙ кристалдары ҡушылыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә.

Ҡушылған тамсылар ауырая һәм ергә ямғыр булап яуа.
Ямғыр оҙаҡ яумай торһа, королоҡ башлана.
Һауа температураһы түбәнәйеү сәбәпле, көндәр һыуына. Шуның өсөн кешеләр йылыраҡ кейенә башланы. Күк тоноғораҡ. Тупраҡ һыуынды, еүеш.

*Һынамыш*

Көҙ аҙағына серәкәй күбәйә икән – йылы ҡышҡа.

*Мәҡәл*

ҺЫУҘЫҢ ҠӘҘЕРЕ ШИШМӘ ҠОРОҒАС БЕЛЕНЕР

*Йомаҡ:*

- Ялт – йолт итә,
Ете саҡрым ер китә. (Йәшен.)
Бызлай ҙа бызлай
Үпкән ере һыҙлай. (Серәкәй.)

*Йыр “*Ямғыр уйнарға саҡыра” Ә.Таһирова, М.Сәлимов.

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**

1 төркөмгә майҙансыҡты тырма менән таҙартыу, 2 төркөмгә – сүп-сар түгеү.

*Маҡсаттар:*

- төркөм менән эшләргә өйрәтеү;
- хеҙмәткә һөйөү уятыу.

**Хәрәкәтле уйындар**

“Дауыл”, “Аҡ тирәк, күк тирәк”.

*Маҡсаттар:*

- уйын ҡағиҙәһенә ярашлы уйнарға өйрәтеү;
- тиҙ уйлау, иғтибарлыҡ, сослоҡ, ойошҡанлыҡ тәрбиәләй.

**Шәхсән эш**

Сәпкә туп ташлау.

*Маҡсат:* мәргәнлекте, ҡул хәрәкәттәренең етеҙлеген, ҡараш ярҙамында аралыҡты билдәләй белеү һәләтен, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.
Үҙ - аллы уйындар өсөн күсермә материалдар.

**Шиғыр:**

«Ҡар бабай»

Көҙгө епшек ҡар яуа –

Сафланып китте һауа

Шатлана малай – шалай –

Яһанылар ҡар бабай.

Тик көҙ ҡыш түгел әле –

Бабайҙың хәле бөттө...

Малайҙар өйгә ҡайтты –

Ҡар бабай иреп аҡты.

(И. Илембәтова)

Тәүге ҡарҙы күҙәтеү. Тотоп ҡарау. Тиҙ генә ереп бөтөүенә иғтибар итеү. Сейә ағасын да ҡарау. Япраҡтары бармы? Башҡа төр ағастарҙы ҡарау. Ниндәй ағастар япраҡтарын ҡойған, иғтибар итеү. Ағастарҙың ҡышҡы йоҡоға әҙерләнеүен аңлатыу.

**Һынамыш:** Сейә япраҡ ҡоймай ҡар ятмай.

**Күҙәтеү № 9**

**Һынамыш:**

Ҡоштар берҙәм осоп китә башлаһа,ҡыш ҡаты килә.

**Шиғыр:**

Көн яғына тартылышып,

Ҡоштар осто талпынып

«Йәйҙе алып китмәгеҙ»,- тип

Ҡарап ҡалдым талпынып.

(М. Дилмөхәмәтов)

**Йомаҡтар:**

1.Үҙе йомортҡа баҫмай

Балаһын да баҡмай.(Кәкүк.)

2.Ҡойроғон ҡайсылап,

Ауыҙын тамсылап,

Ағасһыҙ, мөйөшһөҙ

Өй һалды еүешләп. (Ҡарлуғас.)

3.Ҡолға башында йорто

Эсендә тора йырсы. (Сыйырсыҡ.)

4.Аҡ уймағым һыуға төштө,

Балдаҡтары уйыла төштө. (Аҡсарлаҡ.)

Күсер ҡоштар тураһында әңгәмә үткәреү. Уларҙың йылы яҡҡа осоп китеү сәбәбен, иң беренсе йылы яҡҡа яҙ иң аҙаҡ ҡайтҡан ҡоштар осоп китә. Сөнки улар бөжәктәр менән туҡланалар икәнен аңлатыу.

**Уйын.** Алырмын ҡош, бирмәм ҡош

***Әһәмиәте:*** уяулыҡ, сослоҡ, иғтибарлыҡ үҫтерә.

***Әҙерлек:*** һанашмаҡ әйтеп ҡаҙ, төйлөгән һайлайҙар, ҡалған балалар бәпкә булалар.

***Уйын барышы:*** уйында ҡаҙ, уның бәпкәләр е һәм төйлөгән ҡатнаша.

Төйлөгән булған бала ерҙе соҡоп ултыра. Ҡаҙ , бәпкәләрен эйәртеп, уның эргәһенә килә һәм:

- Төйлөй – төйлөй, ни эшләйһең? – тип һорай. Төйлөгән:

- Бына һинең балаларыңды атып алырға ултырам,- ти. Ә ҡаҙ булған бала уға:

- Мин һиңә балаларымды бирмәйем!- тип яуап ҡайтара.

Шул саҡ «төйлөгән» урынынан тора ла:

- Алам – алам, атар ҡош! – тип ҡаҙҙың бәпкәләренә ташлана.

Ләкин ҡаҙ:

- Бирмәм – бирмәм, битәр ҡош! – тип, бәпкәләрен төйлөгәндән ҡурсалай башлай. Ә бәпкәләр ҡаҙ артынан бер – бер артлы тотоношоп: Сип – сип - сип, - тип йөрөйҙәр.

Төйлөгән деӊ ҡулы тейгән бала уйындан сыға бара. Шулай итеп, уйын ҡаҙҙың бәпкәләре тотолоп бөткәнсе дауам итә.

**Күҙәтеү № 10**

**Һынамыш:**

Торналар бик өҫтән һәм торҡолдашып осһа, көҙ матур булыр.

**Йомаҡтар:**

1.Торрайыҡ та, торрайыҡ! - тип

Яҙын киләләр беҙгә

Таң менән ҡысҡырышалар,

Йәм биреп тирә – йүнгә

Кем белә, кем белә

Йә, әйтегеҙ тиҙ генә? (Торна.)

2.Тарҡы торҡо тора ла

Күккә менеп юғала. (Торна.)

**Шиғыр:**

Торналар киткәндә
Гөлдәр һулып, үлән ҡата,

Һаран ҡояш иртә бата,

“Йылға” ларға томан ята

Торналар киткәндә.

Ҡырҙа моң һәм һағыш була,

Бураларға ашлыҡ тула,

Тирәктәрҙә ҡоштар тына

Торналар киткәндә.

(М. Ғәли)

«Төлкө һәм торна» башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләү.

**Уйын.** «Алырмын ҡош, бирмәм ҡош» (Күҙәтеү № 9)

**Күҙәтеү № 11**

**Һынамыш:**

Болот һирәк булһа, аяҙ һәм һалҡын булыр

**Йомаҡ:** Аяғы юҡ – ил гиҙә

Күҙҙәре юҡ – йәш түгә (Болот.)

**Шиғыр:**

Болот

Беҙҙең яҡҡа

Килеп сыҡҡан

Ана ҡап – ҡара болот

Ҡайҙалыр ул китеп бара

Ергә төшөрҙәй булып.

(Р. Заһиҙуллин)

**Уйын. *Шыу-шыу шыуҙырмаҡ***

***Әһәмиәте:*** иғтибарлыҡ, сослоҡ үҫтереү

***Әҙерлек:*** уйнарға йыйылған балалар, түңәрәк яһап, аяҡ бөкләп, Бер - береһенә һыйынып ултыра. Бер яулыҡ йә туп алына. Түңәрәк уртаһында бер уйнаусы була, ул уйын барышында гел тубыҡланып йөрөргә тейеш.

***Уйындың барышы:*** Түңәрәктә ултырған балалар тубыҡланған уйнаусыға һиҙҙермәй һәм күрһәтмәй генә тубыҡ аҫтынан яулыҡты йә тупты түңәрәк буйлап шыуҙырып (ҡулдан ҡулға) йөрөтә башлайҙар һәм үҙҙәре:

*Шыу - шыу шыуҙырмаҡ,*

*Әгәр тапһаң, һин – зирәк.*

*Ҡайҙа йөрөй яулығым (тубым)*

*Табырға тырыш тиҙерәк,* -

тип ҡат - ҡат һамаҡлайҙар. Түңәрәк эсендәге бала тупты йәки яулыҡты эҙләй башлай. Ә балалар барыһы ла ҡулдарын тубыҡ аҫтына ҡуйып, яулыҡ миндә тигән кеүек ултыралар. Кемдә яулыҡ табыла, шул түңәрәк эсенә инә, ә теге бала уның урынын ала. Уйын шул рәүешле бик ҡыҙыҡлы һәм күңелле дауам итә.

**Күҙәтеү № 12**

**Һынамыш:**

Бесәй бүрәнә тырнаһа көн боҙола, бөгәрләнеп ятһа һыуыҡ була

**Йомаҡтар:**

1.Үҙе мейес башында
Үҙе тун ябынып йоҡлай. (Бесәй.)

2.Йөнө йомшаҡ тырнағы осло. (Бесәй.)

**Шиғыр:**

*“Серем итә“*

Бесәйебеҙҙең көндәре

Ярайһы ғына үтә.

Тамаҡ туйғас ҡырын ятып

Диванда серем итә.

(Р. Заһиҙуллин)

**Уйын « Бесәй, сыскан»**

***Ҡағиҙәhе:*** тәрбиәсенең сигналы буйынса бер-береһенә бәрелешмәй бөтә майҙансыҡ буйлап тигеҙ хәрәкәт итергә.

***Әһәмиәте:*** уйын етеҙлек, ҡырҡыу хәрәкәттәр яһарға, иғтибарлы булырға өйрәтә, тәүәкәллек тәрбиәләй, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтерә.

***Уйындың барышы:*** балалар ҡулға – ҡул тотоношоп ҙур түңәрәк яһай. Бер бала бесәй була, икенсеhе сысҡан була. Тәрбиәсе сигнал биреү менән «сысҡан» булған бала түңәрәк яһап торған балалар араһынан ҡаса, ә бесәй булған бала уны баҫтыра. Бесәй сысҡан йөрөгән юлдан ғына йөрөмәй, уға ҡаршы ла, юлына тура төшөп тә тота ала. Бесәй сысҡанды тотҡас, сысҡан булған бала түңәрәккә баҫа, ә бесәй сысҡанға әйләнә. Түңәрәктән икенсе уйнаусы – бесәй сыға һәм тағы ҡыуышыу башлана.

Балаларҙы ҡоштар артынан күҙәтеү эшләргә өйрәтеү.

Һөйләү телмәрен үҫтерергә, иғтибарлылыкты тәрәнәйтергә.

**Хәрәкәтле уйын:** «Бесәй һәм сысҡандар».

Балаларҙың вистибуляр апаратын, шыуышып йөрөү хәрәкәтен күнектереү, тән һәм аяҡ мускулдарын нығытыу. Сколиозға ҡаршы профилактика үткәреү, һығылмалылыкты нығытыу.

**Хеҙмәт**: майҙансыҡты эре сүптән таҙартыу.

Хеҙмәткә һәм таҙалыҡҡа һөйөү тәрбиәләү, тәртипкә өйрәтеү.

**Уйын күнегеүҙәр:** «Кенгуру»

Һикереү күнегеүҙәрен башҡарыу, уйын барышында яҡшы кәйеф һаҡларға. Физик активлыҡты үҫтереү.

**Индивидуаль эш:** Мәликәгә, Нурияға. Тубыҡтарын бейек күтәреп атлау күнегеүен ҡабатларға. Физик активлыҡты, аяҡ мускулдарын үҫтереү.

**Октябрь – ҡарасәй.**

**Күҙәтеү №1**

**Еңел автомобильде күҙәтеү.**

**Маҡсат:** машинаның тәғәйенләнешен һәм эшмәкәрлеген аңлатыу. Машинаның ниндәй материалдан эшләүен аңларға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:** Йомаҡ ҡоябыҙ:

На тиһәң - атламай,

Тр - р - тиһәң – уҡтамай.

Бесән һалһаң – ашамай,

Ҡысҡыра-ҡысҡыра саба,

Йүгереүҙән бушамай.нимә ул? (машина)

машина кешеләргә ни өсөн кәрәк ул?
Шамонино урамдарында һеҙ ниндәй машиналар күргәнегеҙ бар?
– Урамда үткән машиналарҙа кешеләрҙе йөрөтөргә, әллә йөк ташырға уңайлымы? Кешеләрҙе йөрөткән машина нисек атала? (еңел машина) Машиналар тулыһынса тимерҙән, ә бына тәҙрәләрен быяланан эшләйҙәр. Машина эсендә ултырған кешеләр ел – ямғырҙан шулай һаҡланалар.

**Хеҙмәт**: Биләмәне төрлө сүп – сарҙан, таштарҙан таҙартыу – Бергәләп, татыу эшләргә, эшсән булып үҫергә булышлыҡ итеү.

**Хәрәкәтле уйындар “Беҙ - шоферҙар”, “Тыңлаусан япраҡтар“ –** тәрбиәсенең әйткәненә иғтибарлы булырға булышлыҡ итеү, сигналға әүҙемлектә күнектереү, уяулыҡ, ихтияр ҡөсө тәрбиәләү.

**Шәхсән эш:** бер, ике аяҡлап һикереүҙә күнектереү –

тигеҙлекте һаҡларға, әүҙемлектә күнектереү

**Күҙәтеү №2**

**Юл япрағын күҙәтеү.**

**Маҡсат: -** юл япрағын дарыу үләне булараҡ күҙәтеү. Балаларҙа танып белеү эшмәкәрлеген үҫтереү - дарыу үләндәрен ваҡытын, ерен белеп йыйыу, киптереү, һаҡлау, тотоноуҙы белергә, ауларға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:** ЮЛ ЯПРАҒЫ
Исемем сәйер булһа ла,
Мине бик хөрмәтләйҙәр.
Киҫелһә лә, ҡанаһа ла,
Иң һәйбәт дарыу, тиҙәр.
**Тәрбиәсе:**

- Ни өсөн был үләнде юл япрағы тип атағандар?
- Уны ҡайһы ерҙәрҙә йыйырға була ?
- Юл япрағы беҙҙең илебеҙҙә бөтә ерҙә лә үҫә .

Ул урман ситтәрендә,
юл буәлап үҫергә ярата Хатта беҙҙең майҙансыҡта ла үҫкән.Әгәр берәй бөжәк тешләһә, йылан саҡһа, ҡул йә аяҡ һыҙырылһа юл япрағын бәйләп ҡуйырға кәрәк.Юл япрағы аҡҡан ҡанды туҡтата, ағыуҙы һура .Был үләнде сәскә атҡан саҡта йыйырға кәрәк.Ҡояш нурҙарынан һаҡлап, уны киптерергә мөмкин.
Киптерелгән япраҡтарҙың төнәтмәһе үпкә, ашҡаҙан сирҙәренән һәйбәт дауа һанала .
**Хеҙмәт:** Ҡомлоҡтағы сүп - сарҙы йыйып алы - бергәләшеп татыу һөҙөмтәле эшләргә булышлыҡ итеү.
**Хәрәкәтле уйын:** “Ҡайҙа йәшенгән” – тирә - йүндә дөрөҫ йүнәлеш табырға булышлыҡ итеү.
**Хәрәкәтле уйын “Әбәк” -** иғтибарлылыҡта, етеҙлектә күнектереү.
**Шәхсән эш:** Һикергес аша һикереү - һикергесте дөрөҫ тоторға, ритм һәм амплитуда мәғәнәләрен биреү.

**Күҙәтеү №3**

**Күҙәтеү: Бәшмәктәрҙе күҙәтеү.**
**Маҡсат:**Бәшмәктәр тураһында белемдәрен барлау, танып белеү эшмәкәрлеген камиллаштырыу.
**Эш барышы:**
Йомаҡ ҡойоу:
Әле һары, әле һоро,

Әле ҡыҙыл эшләпә.

Төрлө – төрлө эшләпә

Кешеләрҙән йыйҙырта,

Табаларҙа ҡыҙҙырта.

Ундай тәмле эшләпәләр

Ҡайҙан һуң килә икән?

Исеме нимә икән? (бәшмәктәр)

**Тәрбиәсе -** Һеҙ ниндәй бәшмәктәр беләһегеҙ? Ашарға яраҡлы һәм яраҡһыҙ бәшмәктәрҙе һеҙ беләһегеҙме? Белмәйенсә бәшмәк йыйырға ярамай. Бәшмәктәр тәбиғәт өсөн бик кәрәк, шуға күрә лә уларҙы типкеләп йөрөргә ярамай. Хатта ағыулы бәшмәктәрҙә хайуандарға, бөжәктәргә, ҡоштарға файҙа килтерә. Улар ауырыған саҡтарында ағыулы бәшмәктәрҙе ашап һауығалар.

**Хеҙмәт:** Йәйге уйынсыҡтарҙы йыйып ҡуйыу - уйынсыҡтарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйын: "Ҡырау" -** тупты иҙәнгә ҡаҡлыҡтырып алға табан атлауҙа, сослоҡта, етеҙлектә күнектереү.

**Хәрәкәтле уйын: “Дауыл“ -** иғтибарлылыҡта, сослоҡта

Күнектереү.

**Шәхсән эш:** ҡом тултырылған тоҡсайҙарҙы сәпкә ташлау –

етеҙлек, күҙ күремен күнектереү (глазомер).

**Күҙәтеү №5**

**Күҙәтеү: Миләште күҙәтеү.**

**Маҡсат: Миләш менән таныштырыуҙы дауам итеү.**

**Эш барышы:**

Алҡаларын элеп миләш,

Тулҡынлана саф елгә.

Ниндәй матурмын икән тип.

Шәүләһен ҡарай күлдә .

Миләш ҡайҙа үҫә? Һеҙ уны күргәнегеҙ бармы? Ниндәй ҡоштар һәм хайуандар ошо емеште яраталар? Кешеләр ни өсөн был емеште яраталар?

**Тәрбиәсе:** Миләш бик һомғол, матур ҡыуаҡ. Ул урманда,

Баҡсаларҙа һәм паркта үҫә. Айыуҙар миләште бик яраталар.

Әсе тип тә тормайҙар, рәхәтләнеп ашайҙар. Миләш ҡыуағының

иң бейектәге осон мышылар ашарға ярата, ә бына ҡойолған

емештәрҙе сысҡандар, терпеләр һәм тейендәр рәхәтләнеп

туҡланалар.Ҡыш көнө миләш ҡышлаусы ҡоштарҙың яратҡан

емеше булып ҡала.Кешеләр миләштән ҡайнатма һәм джем, ә бына ағасынан төрлө һауыт - һаба эшләйҙәр.

**Хеҙмәт:** Төрлө ағастарҙың, ҡыуаҡтарҙың гербарий өсөн япраҡтарын йыйыу.

**Хәрәкәтле уйын: "Парово" -** хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү. Көс һәм таһыллыҡта күнектереү. Еңергә, лидер булырға теләк тыуҙырыу.

**Шәхсән эш:** Сәпкә туп менән бәреү – етеҙлек, күҙ күремен күнектереү.